№11
1969

Зоя

~~Зояның алмағасы~~

/Очерк/

Күк йөҙө иҫәпһеҙ-хисапһыҙ йондоҙ шәмдәр емелдәүе менән яктырған. Саңғыларым аҫтында һыты кар шығырҙай. Тик был шығырҙау гәҙәттәгесә түгел һымак.

Тимер сыйдар һуҙылған юлдың ике яғындағы мәғрур карағайҙар ниндәйҙер серле, тантаналы бер тауыш менән геүләй. Юк, геүләмәй, улар миңә үткәндәге ҙур вакиғаларҙы һөйләй...

Урман эсенә бөтөнләй ингәс кенә карағайҙар шауы бер аҙ баҫыла төшкәндәй булды. Уларҙың баш осонан тәгәрәгән ай ғына миңә, әкиәттәге тылсымлы йомғак шикелле, юл күрһәтә. Артымдан калмай килгән күләгәмдән башка бер кем дә юк. Тик урман эсендә ниҙер бар, кемдер йөрөй кеүек...

Капыл куйы ағастарҙың кары ишелеп төштө лә, ни күҙем менән күрәйем, алдыма бер кыҙ сығып баҫты!.. Өҫтөнә йылы тун, башына кыҫка ғына кара сәстәрен баҫтырып, колаксын бүрек кейгән. Бүркендә күктән өҙөп алған бер йондоҙ янып тора. Күҙҙәре лә уның йондоҙҙай балкый. Буй-һыны шундай һомғол, шундай һылыу - хатта был ирҙәр туны ла, һырылған салбары ла уны йәшерә алмай. Һалкындан кыҙарған бит алмалары, балаларса, йылмайған ирендәре уны тағы ла матурлай төшә.

- Таныш булайык, мин - партизанка Таня!- тип ул күн бейәләйенән бәләкәй генә кулын һурып сығарҙы ла - күҙ асып күҙ йомғансы - юк та булды!

...Алдымда карағайҙар араһында иркәләнеп үҫкән зифа бер кайын ғына баҫып тора ине. Саңғы таяғы тейеүҙән уның емелдәп торған әкиәт кейеме лә юкка сыкты.

һирәк-һаяк кына эттәр өргән тауыш ишетелде. Тимәк, Петрищево әллә ни алыҫ та түгел. Ана сыскан күҙендәй генә бер ут күренә. Ауыл йокларға ла яткан, күрәһең. Тик төн генә, мең-мең күҙенең, береһен дә йоммай, уның йокоһон һаклай.

Бына шундай төндә партизанканы фашистәр тотоп алған. Кыҙ уларға үҙен Таня тип исемләгән. Бик һуңлап килһәм дә, мин бына ул үҙенең актык төнөн уҙғарған бер өйҙең ишеген шакыйым.

- Кем бар?

- Мин, инәй. Асығыҙ әле - мин һеҙгә бик йырактан киләм - Башкортостандан...

Йөҙө тәрән йыйырсыктар менән капланған сал сәсле әбей Евдокия Петровна, һүҙен нисектер бик ауырһынып башланы.

Үҙе тамырҙары беленеп торған ярылып бөткән кулы менән башкортса итеп кара яндырып сәй яһай, һалкын куйы һөт менән һыйлай. Йомарт әбей, күрәһең. Ләкин һөйләгәндә, һүҙгә бик һаран кеүек. Өйтерһең дә һәр һүҙен ул йөрәк итенән актарып ала ла ауыртыуҙан тағы туктап тора. Шулай ҙа күргәндәрен кешеләргә һөйләмәй ҙә булдыра алмай. Сөнки кешеләр быны онотоорға тейеш түгел!..

Хәл-әхүәл хакында һораштырып алғандан һуң, ул яйлап кына һөйләй башланы.

- Беҙҙең өйҙә немецтәр штабы урынлашкайны. Кис шулай көндәгесә мейескә яктым. Шөрйәне томаларға тип торғанда ғына ишектән бер кыҙҙы килтереп индерҙеләр. Бер һалдат миңә "русь партизанин" тине. Тентей башланылар. Кесәһенән

ике шакмак шәкәр менән семтем тоҙ тергәгән сығарып, иҙәнгә ырғыттылар. Әйберҙәрен сисендереп алғас, беҙҙе мейес башына кыуҙылар. Шул сак офицерҙәр килеп инде. Үгеҙ кеүек, бынауындай һимеҙ. Еп-ерән сәсле үҙе. Ишекте нығытып яптылар ҙа кыҙҙан партизандар тураһында һораша башланылар. Һәр һорауға ул "юк", "белмәйем" тип тик торҙо, йә бер ҙә өндәшмәне. Бынан һуң уны кайыш менән кайыҙларға тотондолар. Мин тәүҙә иҫәплэп торҙом: дүрт кайыш менән утыҙар кабат һуктырҙылар. Тағы, тағы... Ул өндәшмәне. Тик кайыштар ғына һыҙғырышты. Дүртенсе кабат тотонғанда ғына ул: "Тукмамағыҙ мине, барыбер бер ни ҙә әйтмәйәсәкмен!" тип, асырғанып кыскырып ебәрҙе. Кулын артка кайырып бәйләнеләр ҙә, унан бер һалдат, кулындағы бауынан тотоп, кыҙҙы ишеккә тәртеп ебәрҙе...

Иртәнге сәгәт туғыҙға тиклем бер ни ҙә белә алманык, йоклап та булманы. Иртән халыкты дар ағасы янына кыуып йөрөнеләр. Мин бара алманым. Тик тәҙрәнән генә дар ағасын һырып алған кешеләрҙе, яланғас кылыс менән һыбай йөрөгән һалдаттарҙы күрҙек...

Ай ярым беҙгә кот оскос булды. Кыҙҙың кәүҙәһен алманылар. Яңы йылға каршы төндә миндәге һалдаттар иҫерек көйө дар ағасы янына барып хәнйәрҙәре менән туңған тәнен телгеләп... көлештәләр... Әҙәм актыктары!..

Әбейҙең көлһыу күҙҙәре шул сак бер аҙ кысыла бирәп, уларҙа оскондар күренеп китте. Йөҙөндәге йыйырсыктарына яңылары өҫтәлеп, сал сәстәре кыймылдап куйғандай булды.

- Йә хоҙай,- тине әбей, калкына бирел,- инде был көндәрҙе күрергә яҙмаһын, улым...

Зоя Космодемьянскаянан партизандарҙың кайҙа икәнлеген әйттерә алмағас, уны Евдокия Петровна Воронина әбейҙәрҙең өйөндәге штабтан каршы урамдағы өйгә алып киттеләр. Зоя бында һуңғы төнөн үткәрә.

Урта Йәштәрҙәге асык йөҙлө белорус катыны Прасковья Яковлевна Кулик миңә шул төн хакында һөйләне.

- Кыҙҙы Ворониналарҙан килтергәндә, беҙ әле уның корал һарайын яндырырға торғанда тотолоуын да, уның кем икәнен дә белмәй инек. Уны бик нык тукмағайнылар, бит-ирене канға катып бөткәйне. Керел бер аҙ тын алғас та: "Эсергә бирегеҙ әле",- тине ул акрын ғына. Ләкин мин куҙғалыу менән ук һалдат мине төртөп ебәрҙе лә аяк тибеп кыҫкырырға тотондо. Ә кыҙға был мәл ирен сылатырлык һыуҙан башка бер ни ҙә кәрәкмәй ине. Уға карап, йөрәгем әрнене. Ә шул сак теге һалдат өҫтәлдә быҫкып ултырған шәмде уның ренене килтереп терәне... Мин кыскырып ебәрҙем. Кыҙ, исмаһам, кымшанманы ла. Тик һалдатка шундай итеп караны - һалдат уның карашына сыҙамайынса, артка сигенеп, шәмде ултырта һалды. Өйҙә ығы-зығы купты. Шунан файҙаланып, мин ни булһа ла булыр тип, тиҙ генә һыу алып бирҙем. Ул йотлоғоп-йотлоғоп эсте лә: "Рәхмәт!" тип бышылданы. Шунда һалдаттарҙың береүһе килеп, уның кулындағы бауҙы кинәт тартып алып, кыҙҙы яланаяк, кыҫка ғына эске күлдәктән көйө тышка алып сыкты. Сатлама һыуыктан ишектәр бәҫләнеп,

аскан сакта сыйылдап тора ине.

Һалдат уны 15-20 минутлап яланаяк карҙа йөрөттө. Үҙе өшөгәс кенә кире индереп, йылыныրға кереште. Төндә был йөрөтөү биш-алты тапкыр кабатланды. Тик унан бер һүҙ ҙә әйттерә алманылар. Фашискә уны карҙа йөрөтөү ялыктырғас, ул уның кулдарын ишек тоткаһына бәйләне лә, үҙе урынына икенсеһен торғоҙоп, йокларға ятты.

Вакыт-вакыт кыҙ иҫен юғалтып алға ауып китә лә, ишек тоткаһына бәйләнгән бау тартылып, уның кулдарын кырка башлай. Ауыртыуҙан ул капыл иҫенә килеп, яңынан тур турайып ултыра. Төнгө сәғәт эстәрҙә генә уның кулдарын систеләр. Иртәнгәсә ул һис бер хәрәкәтһеҙ, һис бер ың-ғырашыуһыҙ иҙәндә ятты. Йоклағандырмы ул, белмәйем.

"Бәлки, һуңынан уны эҙләүселәр булыр", тип, мин уның кайҙан, кем икәнлеген белергә тырыштым. Таң аткас, яңынан килеп:

- Кайҙан һуң һин үҙең?- тип һораным. Ул миңә оҙак кына карап торҙо ла акрын ғына:

- Мәскәүҙән мин,- тине.- Ә исемем Таня.

- Ә бында нисек эләктең һуң?

- Мин фашистәрҙе юк итер өсөн задание менән килгәйнем.

- Ә кисә беҙҙәге өс йортто һин яндырҙыңмы әллә?

- Мин,- тине ул һәм бик етди итеп һорап куйҙы:- ә корбандар бармы?

- Коралдар менән ике йөҙ ат янған,- тинем мин.

- Кыҙғаныс, аҙырак булған,- тип куйҙы ул асыу менән

һәм бер аҙ уйланып өндәшмәй торғандан һуң: - Мин беләм - мине йә атасактар, йә аҫасактар, тик мин куркмайым, беҙ бик куп - аҫып бөтерә алмаҫтар. Минең өсөн үс алырҙар,- тине ул. һәм капыл ғына бик һейләшәһе килеп: - Ә һеҙ ниңә бында калдығыҙ?- тип һораны. - Китергә, китергә кәрәк ине һеҙгә. Бит...

Шул сак уның янына теге, төндә уны тәрткәләп йөрөткән һалдат килеп, итеге менән тибеп ебәрҙе лә уға торорға кушты. Ләкин кыҙҙы туңған аяктары тота алманы. Ул тубыктарына ултырҙы. Тик ауыртыуҙан өнөн дә сығарманы.

"Кайҙан былдай көс?" тип аптыраным мин, ләкин уны коткарыу, уға ярҙам итеу мөмкин түгел ине. Беҙҙе кыуып сығарҙылар ҙа ике офицер менән бер тәржемәсе унан һуңғы кабат яуап алырға тырышып, "юк" һуҙен дә ишетә алмағас, беҙ ингәндә инде уға ниндәйҙер бер еүеш салбар кейергә биргәйнеләр. Ләкин ул уны асыу менән ситкә ырғытты:

- Мин - кеше! - тип кыскырҙы.

Уға салбарҙы көсләп кейҙерҙеләр. Мин аяғына ойокбашын кейҙерештем. Уны култыклап, муйынына "Поджигатель" тип яҙылған такта киҫәге аҫып, урамдағы каршыла ғына торған дар ағасына илткәндә, ул ике яғынан килгән һалдаттарҙы як-якка төртөп ебәрҙе лә алға табан уҙе атланы...

Йәш инең әле һин, Зоя! Бик йәш инең, купме ине әле укыйһы китаптар! Күпме ине әле эшләйһе эштәр! Купме йөрөйҙә юлдар, йырлайһы йырҙар, ултыртаһы ағастар, гелдәр, сәскәләр!.. һин бит әле йөрәк түреңдә һаклап йөрөткән

тәүге мөхәббәтеңде уртаклашырға ла өлгөрмәгәйнең, Зоя!

Күпме әле кайтыр коштарға карап, тәүҙә куркыныс булып тойолған, ә һуңынан әйтеп бөтмәҫлек шатлык килтерә торған яҙғы һынауҙарға ашкына инең һин...

Шура менән һине күп мәхрүмлектәр күреп үҫтергә рәвиз әсәңде тыуандыра торған күпме хыялдарың бар ине һинең!..

Ләкин һин дарға табан атлайһың...

Башыңды ғорур күтәреп атлайһың, сөнки һин - комсомолка! Сөнки үҙ илеңде һин ҡәҙерле әсәйеңде яраткан кеүек яратаһың.

Битеңә елбәҙәк ҡарҙар куна - якты донъяның һуңғы сәләмдәре... Ләкин улар ҙа битеңә тейеү менән үк иреп юк булалар. Ә шулай ҙа донъя матур! Һин был матурлыкты, иң ҙур матурлыкты тоя белдең.

Кешенең иң ҙур матурлығы ла үҙ яҙмышын халкының яҙмышына айырылмаҫлык итеп бәйләй белеүҙә, уның бәхете өсөн көрәшеүҙә. Кешенең иң ҙур кес бирә торған һөйөүе лә халкына булған һөйөү ул. Был һөйөү яуапһыҙ калмай. Сөнки халык хәтере - мәңгелек һәм уның һөйөүе иң ҙур бәхет. Кеше бәхетле булып йәшәргә тейеш. Бит кешеләр был донъяға берберейе өсөн бәхет булып йәшәргә тыуғандар. Намыҫлы булып йәшәргә кәрәк!..

Әле мәктәп парталарында сакта ук шулай уйлай инең һин, Зоя һәм кыҫка ғына ғүмереңә әсеңдә лә шулай йәшәргә өлгөрҙөң һин!

...Мин бер нисә кабат Зоя укыған мәктәптә булдым. Мәктәп баксаһында касандыр Зоя ултырткан юкәләр һәм бер алмағас үҫеп ултыра. Яҙын ул ябалак карҙар һымак ап-ак

сәскәләр менән каплана, ә көҙөн уның кып-кыҙыл алмалары һалынып ултыра. Пионерҙар уны айырыуса хөрмәт итеп тәрбиәләйҙәр. Улар менән Башкортостан балалар йортонда үҫкән өлкән пионер вожатыйы Анна Каменская етәкселек итә.

- Зояның алмағасы йыл һайын ҙур уңыш бирә,- ти Анна Ефремовна. - Тик был емештәрҙе Зоя үҙе генә күрә алмай.

Ләкин ул бөтәһенең дә йөрәгендә. Зоя үҙ класында ығырмаулы буй күлдәген кейеп стенанан бөтәһенә лә мөләйем карап ултыра. Уның партаһына иң якшы укығандар ғына ултыра ала.

Мәктәпкә ер шарының төрлө мөйөшөнән төрлө телдәрҙә яҙылған хаттар килә. Ләкин улар аңлашылып тора - сөнки донъяла мөхәббәт теле берәү. Немец пионерҙәре, Артектән кайтышлай, мәңгелек дуслык билдәһе итеп, үҙҙәренең байрағын калдырғандар бында. Юк, улар бер касан да кеше аҫыусылар булмаясактар!..

Мәскәүҙең тарих музейендә Зояның кейемдәре менән бергә конькиҙәре лә һаклана. Уларға карап торғанда, бына Зоя үҙе килеп инер ҙә, конькиҙәрен култығына кыҫтырып, яраткан баксалары - Горький паркына йәки Сокольникигә катокка югерер һымак. Метро вагондарында теләһә ниндәй егет уға тороп урын бирер кеүек. Сөнки уға ни бары ун һигеҙ йәш кенә!

Новодевичье кәберлегенә йыш кына буйға оҙон, сал сәсле бер катын килеп йөрөй. Ике кәбер араһында оҙак-оҙак тороп, ул күп йылдар инде бер үк һүҙҙәрҙе кабатлай:

– Балакайҙарым минең, күҙерлеләрем!..

Мәскәү янында иң ауыр һуғыштар барған көндәрҙә һәләк булған Зоя менән Берлингә илткән юлдарҙа апаһы өсөн үс алып үлгән Шураның әсәһе был яңғыҙ катын. Зоя уға үҙенең зәңгәр күктәй күҙҙәрен төбәп, уны йыуаткан һымак:

– Кайғырма, әсәй, миңә ни бары ун һигеҙ йәш кенә әле!

Петрищевоның киң урамы уртаһында, Зоя үҙенең һуңғы һулышын алған урында, мәрмәр һәйкәл калккан. Сәскәләргә, карағай ылыҫтарына күмелгән был һәйкәлгә тирә-яктан юлдар, һукмактар, саңғы эҙҙәре килеп тоташа. Һәм һәр кем уның ташка ырып яҙылған һуңғы һүҙҙәрен укып, мәңге ун һигеҙ йәшлек кыҙҙың йөрәк тауышын ишетә.

– Эй, иптәштәр! Ниңә бойок карайһығыҙ? Кыйыурак булығыҙ, көрәшегеҙ! Кырығыҙ фашистәрҙе, яндырығыҙ уларҙы, ағыулағыҙ!.. Үлеү миңә куркыныс түгел, иптәштәр! Үҙ халкың өсөн үлеү бәхет ул!.. Хушығыҙ!..

Был хушлашыу үлемһеҙлек менән исәнләшеү ине. Сөнки йәшәү өсөн үҙҙәрен аямағандар үлемһеҙ.

Рәми Ғарипов.